# ПРОГРАММА ВСТУПИТЕЛЬНЫХ ИСПЫТАНИЙ ПО БАШКИРСКОМУ ЯЗЫКУ

Тел тураһында төшөнсә.Тел һәм уның функциялары. Башҡорт теле, төрки телдәр ғаиләһендә уның урыны. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле.

<u>Лексикология</u>

Һүҙ тураһында төшөнсә. Һүҙ – төп лексик берәмек. Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе. Лексик мәғәнә төрҙәре. Күпмәғәнәлелек. Һүҙҙең күсмә мәғәнәһе, уның төрҙәре. Метафора, метонимия, синекдоха.

Омонимдар, уларҙың төрҙәре һәм яһалыу юлдары. Лексик омонимдар. Лексик-грамматик омонимдар. Омографтар. Омофондар. Вариант һүҙҙәр. Паронимдар. Синонимдар, лексик-фразеологик, грамматик синонимдар, уларҙың төрҙәре. Синонимик рәттәрҙең яһалыу юлдары. Синонимдарҙың ҡулланылышы. Антонимдар, уларҙың төрҙәре. Лексик-фразеологик антонимдар. Грамматик формаларҙың антонимлығы. Семантик антонимдар.

Килеп сығышы яғынан хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы. Төп башҡорт һүҙҙәре. Үҙләштерелгән һүҙҙәр.

Фарсы һүҙҙәре. Ғәрәп теленән ингән һүҙҙәр. Урыҫ теленән үҙләштермәләр. Калькалар.

Ҡулланылыу сфераһы буйынса башҡорт теленең лексикаһы. Хәҙерге башҡорт теле лексикаһының актив һәм пассив ҡатламдары. Терминдар. Архаизмдар. Историзмдар. Неологизмдар. Профессионализмдар. Варваризмдар. Диалект һүҙҙәре.

Стилистик һәм эмоциональ-экспрессив күҙлектән башҡорт теленең лексикаһы. Һүҙҙәрҙең стилистик төркөмдәре. Экспрессив-баһалау һүҙҙәре.

<u>Фразеология</u>

Фразеология тураһында төшөнсә. Фразеологик берәмектәрҙең төп билдәләре. Фразеологик берәмектәр, уларҙың мәғәнәүи һәм структур үҙенсәлектәре. Фразеологик берекмәләр, фразеологик берлектәр, фразеологик ҡушылмалар. Үҙ-ара антоним һәм синоним фразеологизмдар. Грамматик төҙөлөшө буйынса фразеологик берәмектәрҙең төрҙәре. Фразеологик берәмектәрҙең килеп сығышы.

<u>Лексикография</u>

Лексикография тураһында төшөнсә. Һүҙлектәр, уларҙың типтары. Башҡорт теленең лингвистик һүҙлектәре.

Фонетика һәм фонология

Фонетика тураһында төшөнсә. Телмәр өндәре. Хәҙерге башҡорт теленең өндәр системаһы. Телмәр өндәренең акустик билдәләре. Телмәр өндәренең артикуляцион билдәләре. Телмәр органдары һәм өндәр артикуляцияһы. Телмәр өндәренең функциональ билдәләре. Фонология тураһында төшөнсә. Һуҙынҡы фонемалар системаһы (вокализм). Һуҙынҡы фонемаларҙың классификацияһы. Тартынҡы фонемалар системаһы (консонантизм). Тартынҡы фонемаларҙың классификацияһы.

Телмәр ағышында өндәрҙең позицион һәм комбинатор үҙгәрештәре: Редукция, протеза, эпентеза, ассимиляция, диссимиляция, метатеза, диэреза. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр өлкәһендә үҙгәрештәр. Сингармонизм законы һәм башҡорт телендә уның үҙенсәлектәре

Ижек. Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү үҙенсәлектәре. Ижек типтары. Интонация һәм уның элементтары. Баҫым. Башҡорт телендә баҫымдың характеры һәм урыны

Орфоэпия.

Орфоэпия тураһында төшөнсә. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орфоэпик нормалары. Фонетик транскрипция.

Графика һәм орфография

Графика. Яҙыу төрҙәре. Башҡорт яҙыуы тарихы. Графика һәм алфавит. Хәҙерге башҡорт алфавиты. Башҡорт графикаһының үҙенсәлектәре һәм ҡыҫҡаса тарихы

Орфография тураһында төшөнсә. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп орфографик принциптары һәм нормалары. Хәрефтәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Һүҙҙәр һәм аффикстар яҙылышы.

Морфемика һәм һүҙьяһалыш

Һүҙҙең морфематик төҙөлөшө. Морфема. Тамыр һәм аффикстар. Аффикстарҙың төрҙәре

Һүҙьяһалыш тураһында төшөнсә. Башҡорт телендә һүҙ яһалыу юлдары. Исемдәрҙең яһалышы. Сифаттарҙың яһалышы. Ҡылымдарҙың яһалышы. Рәүештәрҙең яһалышы.

Морфология

Грамматиканың бер өлөшө булараҡ морфология, уның лексикология һәм синтаксис менән бәйләнеше.

Һүҙ төркөмдәре. Һүҙҙәрҙе һүҙ төркөмдәренә бүлеү принциптары. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре, уларҙың телмәрҙәге функциялары, билдәләре һәм синтаксик функциялары.

Исем. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Субъектив баһалауҙы белдереүсе исемдәр. Исемдәрҙең грамматик

категориялары. Һан категорияһы. Эйәлек категорияһы. Хәбәрлек категорияһы. Билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһы. Исемдәрҙең килештәр менән үҙгәреше. Яһалышы.

Сифат, уның мәғәнәһе, морфологик билдәләре һәм синтаксик функциялары. Төп һәм шартлы сифат. Сифат дәрәжәләре. Яһалышы.

Һан, уның семантик, морфологик билдәләре, синтаксик функциялары. Һандарҙың төҙөлөшө. Төркөмсәләре. Нумератив һүҙҙәр. Яһалышы.

Рәүеш, уның семантик, морфологик билдәләре. Семантик төркөмсәләре. Рәүештәрҙең дәрәжәләре. Синтаксик функциялары. Яһалышы.

Алмаш. Алмаш төркөмсәләре, уларҙың семантик һәм грамматик үҙенсәлектәре.

Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре, уларҙың үҙенсәлектәре. теркәүестәр, бәйләүестәр, киҫәксәләр.

Модаль һүҙҙәр, уларҙың мәғәнәләре һәм синтаксик функциялары. Ымлыҡтар, уларҙың мәғәнәүи төркөмсәләре. Оҡшатыу һүҙҙәре, уларҙың төҙөлөшө.

Ҡылым. Ҡылымдың семантик, морфологик үҙенсәлектәре, синтаксик функциялары. Ҡылымдың башланғыс формаһы. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар.

Ҡылымдарҙың яһалышы. Ҡылымдарҙың грамматик категориялары. Барлыҡ һәм юҡлыҡ формалары. Күсемлелек-күсемһеҙлек категорияһы. Ҡылым һөйкәлештәре. Ҡылымдың зат менән үҙгәреүсе формалары. Хәбәр һөйкәлеше һәм уның заман формалары, уларҙың зат-һан менән үҙгәреше. Бойороҡ, шарт, теләк, ниәт һәм ихтималлыҡ һөйкәлештәре, уларҙың мәғәнәүи һәм структур үҙенсәлектәре.

Ҡылымдың затһыҙ формалары: исем ҡылым, сифат ҡылым, хәл ҡылым, уртаҡ ҡылым; уларҙың семантик, морфологик үҙенсәлектәре, синтаксик функциялары. Ҡылымдың йүнәлеш категорияһы. Ҡылымдың күләм категорияһы, уның бирелеү формалары.Ҡылымдың модаллек формалары.

<u>Синтаксис</u>

Грамматиканың бер өлөшө булараҡ синтаксис. Төп синтаксик берәмектәр. Синтаксик бәйләнеш типтары

Һүҙбәйләнеш, уның төҙөлөшө. Теҙмә һәм эйәртеүле һүҙбәйләнеш. Һүҙбәйләнеш компоненттары араһындағы мәғәнәүи һәм грамматик бәйләнеш төрҙәре. Компоненттар араһында аныҡлау, объект һәм хәл мөнәсәбәттәре. Ярашыу, башҡарылыу, йәнәшәлек, һөйкәлеү бәйләнештәре. Һүҙбәйләнештәрҙе эйәртеүсе

киҫәгә ҡайһы һүҙ төркөмөнән булыуға ҡарап төркөмләү. Ябай һәм ҡушма һүҙбәйләнештәр.

Һөйләм. Төп синтаксик берәмек буларак һөйләм. Һөйләмдең төп билдәләре. Һөйләмдәрҙең структур – семантик типтары.

Ябай һөйләм. Ябай һөйләмдә һүҙ тәртибе. Интонация буйынса һөйләм төрҙәре. Ябай һөйләмдәрҙең структур–семантик типтары. Ике составлы һөйләмдәр һәм бер составлы, йыйнаҡ һәм таркау, тулы һәм кәм һөйләмдәр. Һөйләмдең баш киҫәктәре (предикатив үҙәге). Эйә менән хәбәр: уларҙың мәғәнәһе, бирелеү юлдары. Бер составлы һөйләмдәрҙең структур-семантик төрҙәре. Билдәле эйәле һөйләмдәр. Билдәһеҙ эйәле һөйләмдәр. Дөйөм эйәле һөйләмдәр. Эйәһеҙ һөйләмдәр. Инфинитив-модаль һөйләмдәр. Атама һөйләмдәр.

Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре һәм уларҙың бирелеше. Аныҡлаусы. Тултырыусы, тура һәм ситләтелгән тултырыусы. Өҫтәлмәлек. Хәл. Хәлдәрҙең мәғәнәүи төрҙәре һәм уларҙың бирелеше. Хәл әйтеме.

Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Тиң киҫәктәрҙең үҙ-ара бәйләнеше; улар эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр.

һөйләмдең айырымланған киҫәктәре. Айырымланыу тураһында дөйөм төшөнсә. Айырымланыусы киҫәктәрҙең төп функциялары. Айырымланыуҙың төп шарттары. Аныҡлаусыларҙың, өҫтәлмәлектәрҙең, тултырыусыларҙың, хәлдәрҙең айырымланыуы. Хәл әйтеме һәм уның айырымланыуы.

Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр. Инеш һүҙ менән инеш һүҙбәйләнеш. Инеш һөйләм. Өндәш һүҙ. Вокатив һөйләмдәр.

Парцелляция. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәренең, шулай уҡ эйәрсән һөйләмдәрҙең актуалләшеп килеүе.

Ҡушма һөйләм. Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә. Ҡушма һөйләмдең төҙөлөшө, уның предикатив өлөштәренең үҙ-ара бәйләнеү юлдары.

Теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр, уларҙың структур-семантик типтары.

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. Баш һөйләм менән эйәрсән һөйләм, уларҙың үҙ-ара бәйләнеү юлдары. Мәғәнәһе буйынса эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре. Эйә һөйләм. Хәбәр эйәрсән һөйләм. Аныҡлаусы һөйләм.

Тултырыусы һөйләм. Хәл һөйләм төрҙәре: ваҡыт һөйләм, урын һөйләм, сәбәп һөйләм, һөҙөмтә һөйләм, маҡсат һөйләм, рәүеш һөйләм, күләм-дәрәжә һөйләме, сағыштырыу һөйләме, шарт һөйләм, кире һөйләм.

Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар. Күп эйәрсәнле эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр, уларҙың структур-семантик төрҙәре. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр, уларҙың төп структур-семантик типтары. Теҙемдәр, уларҙың семантик, интонацион, ритмик-мелодик һәм структур үҙенсәлектәре

Сит кеше телмәрен биреү юлдары. Тура телмәр. Ситләтелгән телмәр. Диалог. Полилог. Мәғәнәүи-композицион берәмек булараҡ абзац. Уның стилистик роле.

Пунктуация. Бүлеүсе һәм айырыусы тыныш билдәләре.